*Ризәлә СӘЛӘХЕТДИНОВА*



*”Ҡурай моңо”*

# Матурлыкка ғашиҡ йән

Һыҙылып атҡан алһыу таңдың хозурлығына, киске шәфәктең гүзәллегенә, сылтырап аҡҡан йылға һыуҙарына, алтынға мансылған көҙгө япраҡтарҙың сағыулығына, янып торған ҡыҙыл миләш тәлгәштәренә һоҡланған, ғөмүмән, матурлыҡҡа ғашиҡ ижадсының палитраһы нисек нурһыҙ һәм төҫһөҙ булһын инде. Рәссамдың фантазияһы, күҙәтеүсәнлеге, иғтибарлылығы иң юғары дәрәжәләге ижадсы — Тәбиғәт — тыуҙырған матурлыҡты сикләп үтә алмай. Әлбиттә, матурлыҡты һәр кеше үҙенсә күрә, үҙенсә аңлай, ә рәссам иһә был сихри мөғжизәне башҡаларға үҙе тыуҙырған ижад емештәре аша аңларға өйрәтә. Айҙар Фоат улы Усманов — тап шундай ижадсыларҙың береһе.

Айҙар Фоат улы республикабыҙҙың хозур тәбиғәтле Асҡын районының Билгеш ауылында тыуып үҫкән. Иҫ киткес йәмле тәбиғәт ҡосағына һыйынып ултырған тыуған ауылы, ялан аяҡ йүгереп үҫкән болондары, хуш еҫтәргә күмелгән мәтрүшкәле бесәнлектәре, киңлектәрҙе иңләгән тауҙары, сылтырап аҡҡан шишмәләре рәссамдың күңелен саф мөхәббәт тойғоһо менән арбаған. Шул тәрән хистәр уның һәр бер ижад емешендә (һүрәтме ул, декоратив панномы, аппликация булһынмы) сағылыш тапҡан.

Бала саҡтан уҡ һүрәт төшөрөргә яратҡан үҫмер, яҡты хыялын тормошҡа ашырыу ниәте менән, тәүҙә Ҡ.С.Дәүләткилдеев исемендәге художество гимназияһында белем ала, артабан БДПИ-ның художество-графика факультетын тамамлай һәм декоратив-ҡулланма сәнғәт рәссамы һөнәренә эйә була. Үҙенең диплом эше итеп ул ағасты уйып биҙәк яһау ысулы менән башҡарылған ”Һауа”, ”Һыу”, ”Ер” тип исемләнгән триптихты һайлай. Айҙар Усманов был хеҙмәтенә бөтә оҫталығын һала, тәбиғәткә булған һоҡланыуын үҙенсәлекле алымдар ҡулланып башҡара. Тырышлығы бушҡа китмәй: Мәскәү ҡалаһында уҙғарылған Бөтә Рәсәй художество күргәҙмәһендә тап ошо эше дипломға лайыҡ була. Ошо ваҡыттан алып бөгөнгө көнгәсә Айҙар Фоат улы бик күп сәнғәт әҫәрҙәре күргәҙмәләрендә ҡатнаша. Ә уҙған йылдың май айында иһә Нефтекама ҡалаһының ”Сиринъ” сәнғәт салонында рәссам, уҡытыусы, ”Мираҫ” картиналар галереяһы етәксеһе Айҙар Усмановтың шәхси күргәҙмәһе булып үтте. Айҙар Фоат улын Нефтекама ҡалаһында башлыса ағасҡа уйып һүрәт яһаусы булараҡ беләләр. Ә инде уның гуашь менән, төрлө емеш-еләк орлоҡтарынан, тубырсыҡтарҙан, ағас ботаҡтарынан, япраҡтарҙан, хатта ваҡ таш, быяла киҫәктәренән, тәңкәләрҙән һәм башҡа материалдарҙан яһалған аппликацияларының үҙенә бер айырым йылылыҡ, ҙур оҫталыҡ менән башҡарылыуы айырыуса иғтибарҙы йәлеп итте. Эйе, һуңғы йылдарҙа ижадсының күңелен ағас арбаған. Ул уға ысын мәғәнәһендә ғашиҡ. ”Ағастар ҡояштан нур, ерҙән дым алып үҫәләр, үҙҙәренең һомғол буйҙары,


”Олатайым портреты”

хуш еҫле сәскәләре менән ҡыуандыралар, емештәре менән туйындыралар, ауыр сирҙәрҙән арындыралар. Ағастар ҙа бит үҙ дәүерҙәрендә ниҙәр генә күрмәй: төрлө тәбиғәт афәттәрен дә, һауа торошоноң үҙгәрештәрен дә сая кисерә. Улар бөтәһен дә һүҙһеҙ генә, ҙур сабырлыҡ менән ҡабул итәләр кеүек, хатта кеше серҙәрен дә моңһоуланып тыңлағандай, — ти Айҙар Усманов. — Ағастар үҙҙәренең тышҡы төҙөлөшө, ботаҡтары, япраҡ формаһы менән кешеләргә йәки ниндәйҙер хайуандарға оҡшап тора төҫлө. Кемдәрҙер флористика менән мауыға, кемдер ағастың олононан, тамырҙарынан төрлө һындар яһай, һауыттар эшләй, ҡайырынан декоратив һүрәттәр төшөрә, ваҡ ботаҡтарын үреп, матур-матур йорт кәрәк-яраҡтары уйлап сығара. Ә мин иһә, ағасты киҫеп, семәрләп һүрәт төшөрөргә яратам. Дөрөҫөн әйткәндә, ағас таҡтаһына ҡарау менән унда төрлө һүрәттәр күргәндәй булам. Шул саҡ ағас миңә башҡа кеше аңламаған, күрмәгән, белмәгән серҙәрен, уйҙарын һөйләгән кеүек”.

Эйе, Айҙар Фоат улының һуңғы йылдарҙа башҡарған эштәре форма яғынан декоратив булып ҡалһалар ҙа, йөкмәткеһе менән тағы ла тәрәнерәк, фәлсәфәүиерәк. Мәҫәлән, ”Рәссамдың палитраһы” (”Ватандаш”, №2, тышлыҡтың 3-сө бите) — формаһы менән йомортҡаны хәтерләтә. Үҙендә тәрән бер мәғәнә — Ер йөҙөндә тереклектең барлыҡҡа килеүе. ”Овал — иң матур формаларҙың береһе. Минеңсә, бөтә нимә: тереклек, рәссамдың һүрәте булһынмы, ошо бер нөктәнән башланып, төрлө форма ала. Минең палитрам да овал формаһында, ҡош ояһы кеүек. Унда яңынан-яңы художестволы образдар тыуа, ә миңә, рәссамға, ижад итергә һәр ваҡыт илаһи, аңлата алмаҫлыҡ көс, фәрештәләр ярҙам итә. Ә кешеләрҙең ҡылыҡ-фиғелдәрен, эштәрен боронғо мифтарҙа һөйләнгән Аллаһы Тәғәләнең бөтә нимәне лә күрә торған күҙе, йәғни, руссалап әйткәндә, ”всевидящее око” күҙәтә, — тип аңлатты Айҙар Усманов был тәрән һәм фәлсәфәүи мәғәнәле хеҙмәтен. — Был эшем менән мин бөтә рәссамдарға илаһи ижад көсө, үҙ палитраларын табыуҙарын һәм Ер йөҙөндәге һәр кешегә хеҙмәттәре менән тик шатлыҡлы минуттар бүләк итеүҙәрен ихлас теләйем”.

”Ҡатын-ҡыҙҙың башланғысы”, ”Титаник”, ”Ҡояш һәм ҡоштарҙың бейеүе” тип исемләнгән эштәре лә иҫ киткес матурлығы, етдилеге менән тамашасыны һоҡланырға ла, уйланырға лә мәжбүр итә. Уларҙың пластикаһы, төрлө төҫтәрҙең алмашынып, рельеф биҙәктәрҙең бер-береһенә үрелеп китеүе, һығылмалы һыҙыҡтары, контуры — бөтәһе лә ҡатын-ҡыҙҙың яғымлылығы, мөләйемлеге, үлемгә ҡаршы көрәш асырға баҙнат иткән Мөхәббәттең илаһи, бөйөк матурлығы, көсө, ҡояш, ер, ҡоштарҙың космогонияһы, бейеүҙең стихияһы тураһында һөйләйҙәр.

— Ағас таҡтаһына иғтибар менән ҡараһаң, ул төрлө төҫтәрҙән, һыҙымдарҙан, һырҙарҙан, эҙҙәрҙән тора, — тип һүҙен дауам итә ижадсы. — Мин шулар артына йәшерелгән серҙәрҙе кешеләргә асып бирергә телә-

йем. Әйтәйек, ”Ҡатын-ҡыҙҙың башланғысы”. Материалды ҡулға алыу менән ниндәйҙер йылылыҡ, еңеллек тойғандай булдым. Унда һалмаҡ ҡына бер-береһенә үрелеп киткән һыҙыҡтар, һығылып торған формалар — барыһы ла тик ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас зифа, һомғол буйлы һындарҙы хәтерләтте. Бына шулай минең бөтә ҡатын-ҡыҙҙарға бағышланған, уларға булған тәрән һөйөү хистәремде, һоҡланыуымды аңлатҡан ошо хеҙмәтем тыуҙы. Уның материалы ла йомшаҡ, нәфис ағастан — йүкә таҡтаһынан, асыҡ, йылы төҫтәрҙән тора. Ҡатын-ҡыҙ — ул үҙе бер сер, ижадсыларҙы илһамландырыусы, кешелекте дауам итеүсе зат.



*”Уҡытыусыма бүләк”*

Ысынлап та, был панноға иғтибар менән ҡараһаң, йәшерен мәғәнәгә эйә нимәләрҙе күрергә мөмкин. Тулышҡан арыш башаҡтары һымаҡ тулҡынланып, орлоҡтары тирә-яҡҡа һибелеп тора төҫлө, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер көнсығыш һауытын да хәтерләтә, әйтерһең, уға бар йыһандың әлегәсә кеше асып бөтмәгән мөғжизәләре тупланған.

Әлбиттә, ижадсының үҙ илһамландырыусыһы бар — тормош иптәше Лариса Әхнәф ҡыҙы Айҙар Фоат улының таянысы ла, терәге лә, ә иң мөһиме, ижадсының эштәренә тәүге баһа биреүсеһе. Ғүмер юлдары студент саҡтарында киҫешеп, уларҙы ҡауыштырған. Ләйсән менән Лилиә исемле ҡыҙҙары ла үҫеп буй еткәндәр.

Был юлдарҙың авторы иһә Айҙар Фоат улы менән Лариса Әхнәф ҡыҙын үҙенең студент йылдарындағы уҡытыусылары булараҡ, тормош баҫҡыстарынан үрләгәндә аҡыллы кәңәштәре менән ярҙам иткән, матурлыҡҡа ғашиҡ йәндәр итеп белә.

”Мираҫ” картиналар галереяһында яуаплы вазифа башҡарыуына ҡарамаҫтан, Айҙар Фоат улы бөгөнгө көндә лә Нефтекама ҡалаһының сәнғәт мәктәбендә эшләп, киләсәк быуын йәштәрҙең күңелендә матурлыҡ тойғоһо, тирә-яҡ мөхиткә һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләүен дауам итә. Тырыш хеҙмәте өсөн ул 1996 йылда Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы тигән исемгә лайыҡ була.

— Уҡытыусы булараҡ, балаларҙа тормошҡа дөрөҫ ҡараш тәрбиәләргә, тәбиғәт һәм кеше араһындағы мөнәсәбәттәрҙе аңлатырға тырышам. Ысын рәссам тормошҡа, тәбиғәткә, кешеләргә, үҙ халҡының тарихына, сәнғәт өлгөләренә ниндәй мөнәсәбәттә булһа, уҡыусыларҙа ла шундай мөнәсәбәт тәрбиәләргә ынтылам, — ти тәжрибәле уҡытыусы.

Эйе, ул уҡыусылары менән бергә теге йәки был сәнғәт төрөнөң, материалдың төрлө үҙенсәлектәрен, яңынан-яңы мөмкинлектәрен асып, үҙ эшенән йәм, тәм табып ижад итә.

Рәссамдың ”Йәшел кис”, ”Алһыу кис” тип исемләнгән һүрәттәренә күҙ һалһаң, йәмле йәйге кистәр ҡосағына сумғандай, уларҙың һулышын тойғандай булаһың. Йәшел төҫтөң сағыулығы саҡ ҡына алһыуланған киске күктең томанланып тороуы менән аралаша, йәки болонда үҫкән сәскәләрҙең төрлө төҫтәре менән ҡушыла. Йәшел буяуҙың ижадсы тарафынан йыш ҡулланылыуы күҙгә ташлана, сөнки был — Айҙар Фоат улының иң яратҡан төҫө: күңеленә йылылыҡ өҫтәй, йәненә тыныслыҡ бирә, ижади үрҙәргә илһамландыра.